*Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ,*
*филология фәндәре докторы*

# Әбүбәкер Диваевтың ғилми-ижади мирасы һәм башҡорт фольклористикаһының актуаль проблемалары

*Әбүбәкер Әхмәтйән улы Диваевты (1855—1933) берәүҙәр этнограф, икенселәре — археолог, өсөнсөләре — ономастика белгесе, лингвист, дүртенселәре — археограф, бишенселәре педагог, ғилемдең бүтән өлкәләре маһиры тип иҫәпләр булған. Уларҙың һәр береһе үҙенсә хаҡлы. Әле лә шулай.*

*Ҡарамаҡҡа, хәрби уҡыу йортон, Ырымбурҙағы Неплюев кадет корпусын тамамлап, ғүмерен хәрби хеҙмәт менән бәйләгән, полковник дәрәжәһенә өлгәшкән был шәхесебеҙ менән фәндең әле генә телгә алынған өлкәләре араһында бер ниндәй ҙә уртаҡлыҡ булыуы мөмкин түгел кеүек. Әммә факт факт булып ҡала: Диваев үҙен һәр фәнгә маһир зат итеп таныта.*

## 1. Милләттең асылын асыусы фәндәргә ылығыуының төп сәбәптәре

"1884 йылда Һырдаръя губернаһы генерал-губернаторы Н.И.Гродековтың урындағы халыҡтың фольклорын һәм этнографияһын өйрәнергә теләүе Ә.Диваевтың этнография менән шөғөлләнә башлауына сәбәп була. Н.Гродеков фән өсөн түгел, ә шул рәүешле Урта Азия халыҡтарын Рәсәйгә тағы ла нығыраҡ буйһондороу өсөн тырыша. Маҡсатына ирешеү өсөн был эшкә ул аҫаба халыҡтың теле, ғөрөф-ғәҙәттәре буйынса белгес Ә.Диваевты йәлеп итә". Шулай тип яҙа "Әхмәтзәки Вәлиди менән Әбүбәкер Диваевтың мөнәсәбәте хаҡында" мәҡәләһендә йәш ғалим Әхәт Сәлихов (25). Бында дөрөҫлөк барҙыр. Ни өсөн тигәндә, Әхмәтзәки Вәлидиҙең "Өфөбөҙҙән сыҡҡан бер ғалимдың хеҙмәтенә егерме биш йыл тулыу мөнәсәбәте менән" тигән мәҡәләһендә әйтеүенсә, Диваевтар борон-борондан батша властары өсөн ышанысло заттар иҫәпләнгән. Ни өсөн икәнен үҙ һүҙҙәрем менән аңлатып тормайым, әле телгә алынған

мәҡәләнән бер өҙөк килтереү менән генә сикләнәм: "Әбүбәкер эфәнде... асылында Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙе Туҡай ауылының дворян башҡорттарынан. Ул етенсе быуында башҡорт тарихында бик мәшһүр булған старшина Сөләймән Диваевҡа тоташа (Әбүбәкер бин Әхмәтйән бин Шаһморат бин Фәрехшат бин Ишмөхәмәт бин Дауыт бин Сөләймән бин Дивай). Әбүбәкер эфәнденең нәҫел-нәсәбе бер рисәлә һүрәтендә бик яҡшы итеп яҙылған, хужаһы уны рәхим итеп миңә ҡулланырға бирҙе. Әбүбәкер эфәнденең төп бабаһы булған Дивай Навай улы кантондарынан элекке Стәрле өйәҙендә старшиналыҡ иткән һәм полковник дәрәжәһендә булып, 1729 йылда вафат булған. Уның улы Сөләймән тағы старшина булып торған һәм 1756 йылда фетнәнең башлығы булған Батырша мулланы тотоп алған. Ошоноң өсөн әбей батша Елизавета Петровна уны баш ҡалаға саҡырып алған. Сөләймән старшина унда күп хөрмәттәр күргән..." (9). Әбүбәкерҙең шундай заттан булғанын күҙ уңында тотҡандыр, бәлки, тим, теге генерал-губернатор. Әхәт Сәлихов әйтмешләй, ул, ысынлап та, "Урта Азия халыҡтарын Рәсәйгә тағы ла нығыраҡ буйһондороу өсөн" уларҙың ғөрөф-ғәҙәтен, телен нығыраҡ өйрәнеү маҡсатынан сығып эш иткәндәр. Оҡшаш хәлде үҙебеҙҙең тарихтан да табабыҙ. Бығаса шулай булды бит. Тарихсыларыбыҙҙан башлап, телселәребеҙ ҙә, фольклорсыларыбыҙ ҙа (һуңғылары эсендә ҡайнап маташҡан мин фәҡирегеҙ ҙә), башҡаларыбыҙ ҙа, бөйөк рус милләте вәкиле булғаны өсөн генә, хәтер һаҡлау йөҙөнәнме, ярамһаҡланыуҙанмы, Татищевтың да, Перовский, Циалковский, Ильминский, Бессонов һәм башҡорт илен өйрәнеүсе бүтәндәрҙең дә эшмәкәрлеген, күккә күтәреп үк маҡтамаған сүрәттә лә, тик бер яҡтан ғына күреп, бер яҡлы ғына баһаланыҡ: имеш, улар Башҡортостан тарихын, башҡорттоң телен, ижадын өйрәнеүгә ҙур өлөш индергән. Ә шул заттарҙың ҡайһыларының башҡорт ерен тартып алып, уны ҡамалап тотоу өсөн таш ҡәлғәләр төҙөтөүенә лә, шуға ҡаршы сығып, ихтилалдар күтәргән ҡыйыу ир-егеттәребеҙҙең йә телен, танауын, ҡолағын, йә аяҡ-ҡулын, баштарын киҫтереүен, йә шешкә ултыртыуын, йә ҡабырғаһынан тимер ырғаҡҡа элдереүен, ауылдарыбыҙҙы утҡа тотоуын; икенселәренең, Урта Азия халыҡтарын ҡанға батырып, Рәсәйгә буйһондороуға башҡорт атлыларын ылыҡтырыуын, өсөнсөләренең, асылда, миссионерлыҡ сәйәсәтенә хеҙмәт итеүен күрмәмеш тә белмәмеш булдыҡ. Ә.Сәлихов телгә алған Н.И.Гроденков та ана шундай уҡ заттарҙан булған: Рәсәй батшалығы алып барған колонизаторлыҡ сәйәсәтен уңышлы ғәмәлгә ашырыу өсөн урындағы, уларса әйткәндә, "туземец"тарҙың асылын асыусы фәндәргә таянмаҡ булған. Әммә Әбүбәкер Диваевтың түрә әйткәнгә генә шул фәндәр менән шөғөлләнә башлауына бик үк ышанғы килмәй. Бай библиографияһы, ҡулға юлыҡҡан баҫмалары, шуларға бирелгән баһаларҙан да шундай һығымта яһап була: Диваев милләттең асылын асыусы фәндәргә — этнографияға, фольклор, тел, археология, археография фәндәренә кәрәкле материал туплау эшен бик яратып атҡарған. Мәғлүмдер ки, түрә ҡушыуы буйынса, ул түрә ни тиклем дәрәжәле булмаһын, фәнде яратыу мөмкин түгел.

Минең ҡарамаҡҡа, Әбүбәкер Диваевтың милләт асылын асыусы фәндәргә ылығыуында ике сәбәп төп ролде уйнаған булырға тейеш. Берҙән, ул донъяға килгәндә, башҡорт ғаиләһендә, ғөмүмән, башҡорт

йәмғиәтендә традицион йола ҡағиҙәләре, шул йолалар менән айырылғыһыҙ бәйләнешле, тик шулар менән бергә генә бер бөтөн эстетик күренеш хасил итмәле поэтик ауыҙ-тел ижады һәм музыкаль фольклор бөтә булмышында теремек кенә йәшәп ятҡан. Әбүбәкергә шул шарттарҙа, шуларҙан рухланып тәрбиәләнергә заман үҙе мул форсат биргән. Замандаштарыбыҙҙы Диваев менән тәүләп таныштырыусы Әхмәтзәки Вәлидиҙән һуң быуатҡа яҡын ваҡыт үткәс, шул мәшһүр милләттәшебеҙ хаҡында яҙыусыларҙың береһе булған ғалим Р.З.Шәкүровтың: "Әбүбәкер ғаилә шарттарында һәйбәт тәрбиә ала", — тигәне лә шуға ҡеүәт (27, 276). Икенсенән, Әбүбәкер уҡыған уҡыу йорто, хәрби хәжәткә тәғәйен кадрҙар әҙерләргә тейеш булһа ла, "каллиграфия, архитектура һәм һынлы сәнғәт буйынса ярайһы уҡ күнекмәләр" биреүсе, "география, математика, бигерәк тә тарих, әҙәбиәт, тел өйрәнеү менән мауығыу" (27, 276) мөмкинлеге тыуҙырған, рус, татар, ҡаҙаҡ, фарсы, ғәрәп, Урта Азия халыҡтары телдәрен үҙләштерергә мөмкинлек биргән, француз теле менән дә таныштырған һәм, ғалим Ғ.С.Ҡунафин әйтеүенсә, шул телдәрҙә яҙған ғалимдарҙың, яҙыусыларҙың "әҫәрҙәрен үҙаллы уҡыу кимәленә етергә" (1, 6) кадеттарға уңай шарттар булдырған. Үҙ заманында мәшһүр мәғрифәтсебеҙ Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев та ошо уҡыу йортонда ошо шарттарҙа ғилем эстәгән. Уның тарихсы, полиглот-телсе, этнограф, шағир булып формалашыуына остазы Мирсалих Мирсәлим улы Биксуриндың (1819—1903) йоғонтоһо ҙур була. Ырымбурҙағы Неплюев кадет корпусында ғәрәп, башҡорт, ҡаҙаҡ, татар, фарсы телдәренән уҡытҡан был башҡорт генералы үҙе лә лингвистика, фольклор ғилеме, тарих өлкәһендә тикшеренеүҙәр, күҙәтеүҙәр алып барған, шуларға нигеҙләнеп, уҡыу әсбаптары, дәреслектәр яҙған. 1825 йылда хәрби училище сифатында асылып, Ырымбур губернаһының тәүге губернаторы И.И.Неплюев (1693—1773) ойошторған һәм 1844 йылда кадет корпусы итеп үҙгәртелгән данлыҡлы уҡыу йортонда Биксурин 1841 йылдан алып 1878 йылғаса уҡытҡан. Тимәк, Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев өлөшөнә төшкән ғилем нурында Әбүбәкер Диваевҡа ла ҡойоноу бәхете насип булған. Был уҡыу йортона ул Өмөтбаевтан һуңғараҡ инеп, генерал Биксурин отставкаға китерҙән ике йыл элек кенә тамамлап сыға.

Хәрби хеҙмәтен Төркөстанда атҡарыуға тәғәйенләнгәс, Диваевҡа үҙенең остазынан алған һабаҡтары бик тә ярап ҡала. Шул биләмәнең иңен иңләп, буйын буйлап, күп тапҡырҙар үтеүҙе талап иткән вазифаһы уға урындағы төрки ҡәүемдәренең тормошон, тарихын, йолаларын, фольклорын өйрәнергә, шулар хаҡында бай материал тупларға форсат биргән.

Тарихты өйрәнгәндә Диваев фольклорға, фольклорҙы өйрәнгәндә тарихҡа таянып эш итә. Шуға ла Чимкенттағы өлкә тарих һәм тыуған яҡты өйрәнеү музейының ғилми хеҙмәткәре, замандашыбыҙ Бауржан Байтанаев әйткәненсә, фольклор буйынса ул йыйған материалдарҙың иң тәүҙә "Сборник материалов по статистике Сырдарьинской области" тигән йыйынтыҡтың этнография бүлегендә (12, 38—48) баҫтырылыуына аптырайһы түгел (1, 10). Был баҫмаһы "Албаҫты" тип аталһа ла, унда Чимкент өйәҙендә Биксәйет Манкишев, Рөстәмтүрә Аппактурин, Бикбулат Ҡылысбаевтарҙан яҙып алынған ен, арбак, карабассын һәм башҡалар хаҡындағы демонологик инанмыштар ҙа бирелгән.

## 2. Әбүбәкер Диваевтың фольклорсылыҡ эшмәкәрлеге

Баҫтырылған библиографик белешмәләренән Ә.Диваевтың үҙ халҡының фольклоры менән шөғөлләнеү-шөғөлләнмәүе хаҡында аныҡ ҡына мәғлүмәт табыу ситен. Шулай ҙа беҙ уны хаҡлы рәүештә башҡорт эсенән сыҡҡан иң тәүге фольклорсы тип әйтергә хаҡыбыҙ бар.

Ә.Диваев йыйған фольклор материалдары араһында әкиәттәр өҫтөнлөк итә. Әкиәттәр араһында тормош-көнкүреш характерындағыларының күпселекте тәшкил итеүе күҙгә ташлана. Һәр хәлдә, Алдар, Ерәнсә, иҫәр таҙ, аҡыллы ҡыҙ, аҡыллы өс ағай, аҡыллы батша, Лоҡман Хаким хаҡындағы әкиәттәр күберәк осрай. Байтағы ҡаҙаҡ һәм ҡырғыҙҙарҙан яҙып алынған был әкиәттәрҙең варианттары башҡорт әкиәтселәре репертуарына ла хас икәне мәғлүм.

Яҡташыбыҙ яҙып алған эпостар хаҡында ла шуны әйтергә мөмкин. Улар араһында ла ҡаҙаҡтарҙан яҙып алынғандары өҫтөнлөк итә. Шуларҙан беҙҙең өсөн айырыуса әһәмиәтлеһе — Алпамыша батыр, Сура батыр, Эдиге (Иҙеүкәй) хаҡындағылар. Шул уҡ ваҡытта Сура батыр хаҡындағыһының ҡарағалпаҡ, ҡырғыҙ варианттары ла теркәлгән. Уларҙың да үҙаллы версиялары башҡорттарға яҡшы таныш.

Ә.Ә.Диваев хеҙмәттәренең библиографияһы, уның ғилми-ғәмәли эшмәкәрлеге хаҡындағы мәҡәләләр һәм китаптар менән таныш кеше иғтибар итмәй ҡалмайҙыр: ҡырғыҙҙың этнографияһына, космогонияһына, демонологияһына, әкиәттәренә, мәҡәлдәренә, йомаҡтарына, йола-инаныстарына ҡағылышлы материалдар араһында "Манас" эпосы ла күҙгә ташлана. Баҡтиһәң, ғалимыбыҙ уға ла юлыҡҡан булған. Был хаҡта беҙгә Әхмәтзәки Вәлидиҙең "Хәтирәләр"е төплө мәғлүмәт бирә. Профессор Николай Федорович Катановтың ярҙамы менән 1914 йылда ул Урта Азияға сәйәхәт ҡыла. Был эште Ҡазан университетының урындағы тарих, археология һәм этнография йәмғиәте ойоштора. Быға тиклем ул 1909—1910 йылдарҙа Ҡазандағы "Касимия" мәҙрәсәһендә мөғәллимлек итеү менән бер рәттән "Төрөк тарихы" ("Төрөк һәм татар тарихы") китабын яҙып, 1910—1911 йылдарҙа университетта ирекле тыңлаусы рәүешендә Н.Ф.Катанов, В.А.Богородский, М.М.Хвостов, К.В.Харлампович кеүек күренекле профессор һәм уҡытыусыларҙан һабаҡ алырға, Катановтың "Алтай төрөктәрендә шиғыр төҙөлөшө" тигән хеҙмәтен немецсанан төрөксәгә тәржемә итергә, профессор Богородский менән бергәләшеп "Башҡорт һәм татар һөйләштәрендә тон һәм вибрация" тигән мәҡәлә яҙырға өлгөргән, Бөрйән башҡорттары йәшәгән төбәккә сәйәхәт ҡылып, шул турала "Шура" журналында мәҡәлә баҫтырып, хуплауҙар ишетергә лә өлгәшкән була. Урта Азияны ҡыҙырған сағында иһә Әхмәтзәкигә милләттәше Әбүбәкер Диваев йөрөгән, тикшергән төбәктәр аша үтергә тура килә. "Хәтирәләр"ендә яҙыуынса, Ташкент, Фирғәнә, Сәмәрҡәнд, Бохара вилайәттәрен гиҙеп, ҡулъяҙма әҫәрҙәр эҙләй, Фирғәнә үзбәктәренән этнографик материалдар йыя. Ана шул сәйәхәтендә Әбүбәкер Диваев менән таныша. Уның хаҡында Әхмәтзәки Вәлиди былай тип яҙған: *"...батша ғәскәре офицеры, полковник, сығышы менән башкорт Әбүбәкер Диваев каҙак, кырғыҙ халыктарының этнографияһы буйынса күп кенә мөһим әҫәрҙәр нәшер итте"* (8, 131). "Хәтирәләр"ҙә әйтелеүенсә, Әхмәтзәки Вәлидигә ул ҡырғыҙҙың мәшһүр "Манас" эпосы-

ның бер вариантын бүләк итә. Аҙаҡ Ҡазанда танышҡан ҡырғыҙ студенты менән әңгәмәлә (ә ул егет үҙе манассы булып сыға) эпостың Диваев биргән ҡулъяҙма вариантының (ул ғәрәп графикаһында XIX быуатта теркәлгән) "Радлов тарафынан нәшер ителгән билдәле вариантынан бөтөнләй айырылған"лығын асыҡлай (8, 134).

Ә.Диваев мәҫәлдәргә лә ныҡ иғтибар иткәнгә оҡшай. Ул баҫтырған фольклор материалдары араһында "Бүре менән һарыҡ бәрәсе", "Дөйә, юлбарыҫ, ҡондоҙ", "Бүре менән төлкө", "Төлкө, бүре менән юлбарыҫ", "Төлкө менән ҡарға", "Төлкө, юлбарыҫ, дөйә менән суҫҡа", "Төлкө менән эт", "Төлкө, айыу менән көтөүсе", "Төлкө менән бүҙәнә", "Төлкө, ташбаҡа менән талпан" ише мәҫәлдәр бар. Был сәсмә әҫәрҙәрҙе хайуандар тураһындағы әкиәттәр тип ҡарарға ла була.

Мәҡәл һәм тапҡыр һүҙҙәр ҙә (идиоматик әйтемдәр йәки фразеологик берәмектәр) Ә.Диваевта ғилми ҡыҙыҡһыныу уятыр булған. Ташҡа баҫтырғанда ул, ғәҙәттә, "казахские пословицы", "киргизские афоризмы", "сартовские пословицы", тип, ғәҙәтенсә, уларҙың да ҡайһы халыҡ эсендә яҙып алыныуын асыҡ күрһәтер булған. Ә бына *"Сборник материалов для статистики Сырдарьинской области"* тигән ғилми яҙмаларҙың 1891, 1895, 1897, 1916 йылдарҙағы сығарылыштарын (Ташкент) баҫтырғанда, ҡайһы халыҡтан яҙып алыныуын асыҡ әйтмәһә лә, уларҙың шул уҡ ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ һәм һарттарҙыҡы икәненә төшөнөүе ҡыйын түгел.

Әбүбәкер Диваевтың ғилми мираҫында ҡырғыҙ, ҡаҙаҡтарҙың һыҡтауҙарын, миҙгел йолаларын, уйын фольклорын, йондоҙҙар, ҡояш хаҡындағы космогоник ҡараштарын, үзбәктәрҙең, ҡырғыҙҙарҙың ырымдарын, им-том, арбауҙарын сағылдырған материалдар, шулай уҡ легенда, риүәйәт, туй йолалары, әйтеш өлгөләре, Ҡорҡот-ата кәшәнәһе хаҡындағы мәғлүмәттәр ҙә бар.

### 3. Беҙҙең өмөт

Ә.Диваевтың ғүмер буйы халыҡ араһынан йыйған материалдарының баҫылып сыҡҡаны күпме лә, баҫылмағаны күпме — уның иҫәбе-хисабы аныҡ билдәле түгел. Ҡулъяҙмаларының мәғлүмдәре Алматы, Санкт-Петербург, Мәскәү һәм Ташкент архивтарында, В.В.Бартольд, В.П.Наливкин, Н.П.Остроумов ише ғалимдарҙың шәхси архивтарында, фондтарында һаҡлана. Сөнки яҡташыбыҙ улар менән хәбәрләшеп торған, табыштарының күсермәләрен уларға ебәргеләгән. 1920 йылда Етеһыу өлкәһендә уҙғарылған бер экспедиция ваҡытында йыйған материалдарының ғына күләме ике меӊ биш йөҙ биткә етә тигән мәғлүмәткә ҡарағанда (1, 10; 27, 279), ғүмер буйы туплағанының ни тиклем булыуын күҙ алдына килтереүе ҡыйын түгел. Йыйынтыҡтарҙа шуларҙан бары ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, ҡарағалпаҡ, һарттарҙан яҙып алынған өлгөләр генә баҫтырыла килә. Әлегәсә ташҡа баҫылмағандары араһында башҡорттарҙан яҙып алынған йәки ҡасандыр тыуған төбәгендә ишеткәнен хәтере буйынса теркәгән башҡорт фольклоры өлгөләре лә булыуы ихтимал тигән өмөт бар. Дөрөҫ, Ә.Ә.Диваевтың ғилми эшмәкәрлегенә 25 йыл тулыу айҡанлы Әхмәтзәки Вәлиди яҙған мәҡәләнән аңлашылыуынса, башҡорт этнографияһы һәм фольклоры буйынса материал йыйыуға 1915 йылға

тиклем был шәхесебеҙҙең ҡулы теймәгән. Шуға ла Ә.-З.Вәлиди уның хаҡындағы һүҙен шулай тамамлаған: *"Беҙ өмөт итәбеҙ ки, был оло этнографыбыҙ әле бынан һуң оҙон ғүмер һөрөр һәм уны халкы ла танып белер, ул үҙе лә үҙенә һөйөклө халкының яңы майҙанға сығып килгән һәм мөхтәрәм картты бик кыҙыкһындыра торған әҙәбиәтендә (*йәғни ғилми хеҙмәттәрендә. — *Ә.С.) үҙенең милли кәләменең эҙен калдырыр"* (10). Ә.Ә.Диваевтың тыуыуына 150 йыл тулыу айҡанлы баш ҡалабыҙҙа ғилми симпозиум үткәреү Ә.-З.Вәлиди өмөт иткәндең тәүге өлөшөнөң аҡлана башлауына тос миҫал булды. Ә мин әйткән өмөт иһә үҙ нәүбәтендә Ә.-З.Вәлиди өмөт иткәндең икенсе өлөшөнә нигеҙләнә. Шуға күрә лә етмеш һигеҙ йәшкә тиклем һуҙылған ғүмеренең иң күп өлөшөн, йәғни 57 йылын Башҡортостандан ситтә (ә ул кадет корпусын 21 йәшендә тамамлап, хәрби хеҙмәтен Ташкентта башлап ебәрә), Төркөстан тарафтарында үткәреп, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, үзбәк, ҡарағалпаҡ халыҡтарының теле, тарихы, этнографияһы буйынса материалдар, археографик ҡомартҡылар йыйыу менән бер рәттән, уларҙың фольклор өлгөләрен теркәп ҡалыуға ла ҙур өлөш индергәне, әммә башҡорт халыҡ ижады әҫәрҙәрен йыйыу-йыймауы әлегә мәғлүм булмаған өсөн генә Диваевты башҡорт фольклорсыһы тип атауы ла ҡыйын тигән фекергә килергә иртәрәк. Әхмәтзәки Вәлидиҙең "Хәтирәләр"ендә һәм Башҡортостандың ҡыҫҡаса энциклопедияһында, китаптарында Рәшит Шәкүров тарафынан һаран ғына әйтелгән мәғлүмәттәрҙән тыш, Ә.Ә.Диваев һәм уның ғилми эшмәкәрлеге хаҡында башҡорт ғалимдарының быйылғы юбилейынаса өндәшмәй ҡалыуҙары ла, Ч.Вәлиханов, Н.Катанов, А.Самойлов, В.Бартольд, Н.Бенедиктов, Р.Бирҙебаев, В.Гордлевский, Х.Зарипов кеүек күренекле ориенталистар, фольклор, этнография, тел белгестәренең хеҙмәттәрендә уның Төркөстан ғалимы булыуына баҫым яһалыуы ла, ошо рухта диссертациялар яҡланылыуы ла үҙен башҡорт фольклоры ғилеме йөҙөнән һыҙып ташларға нигеҙ бирә алмай. Әхмәтзәки Вәлидиҙең мәҡәләләрендә һәм "Хәтирәләр"ендә билдәләнеүенсә, Диваев бер саҡта ла үҙенең башҡортлоғон онотмаған. Юҡһа, Әхмәтзәки Вәлиди уның хаҡында: *"...ул беҙҙең халыктың рухын, йәнен ап-асык күреп белә. Ул үҙ халкын, кәүемен һөйә, уның якшы яктарын белеп, кулы менән тотоп карап һөйә,"* — тип яҙыр инеме?! Ә инде ҡәрҙәш халыҡтарҙың мәҙәниәтен, фәнен үҫтереүгә фиҙакәр хеҙмәт итеүе беҙҙең шул халыҡтар менән дуҫлығыбыҙҙы, хеҙмәттәшлегебеҙҙе нығытыуға баһалап бөткөһөҙ өлөш индергән. Быныһы бер булһа, йәнә шул: фольклорҙы этнография күҙлегенән, этнографик күренештәрҙе фольклор материалдары күҙлегенән күҙәтеүҙәре дөйөм төркиәт фәне өсөн әһәмиәтен бөгөн дә юғалтмаған. Этнографик мәғлүмәттәрҙе йыйыу методтары һәм программаһы хаҡындағы инструкцияһы ла ана шундайҙарҙан (15).

### 4. Диваевтың кәңәштәре

Үҙенең инструкцияһында Ә.Ә.Диваев өйрәнеләһе урында йәшәүсе ҡәүемдең составын, уның эске бүленешен, тел үҙенсәлектәрен, сословие, ғаилә хәлен, инаныстарын, динен асыҡлауҙан башлап, артабан урындағы хоҡуҡи мөнәсәбәттәргә (ғаилә, никах тәртибенә, мираҫҡа хоҡуҡ, хөкөм мәсьәләләренә) иғтибар итергә кәңәш бирә. Этнографик мате-

риалдар туплағанда, тормоштоң матди яғына, йорт һәм уның эске йыһазландырышын, тәғәйенләнешен дә, кейем-һалым, биҙәү-биҙәнеү, туҡланыу үҙенсәлектәрен дә иҫәпкә алырға тәҡдим итә. Идара, кәсеп, шөғөл, мәғариф, милли байрамдар, халыҡ тормошоноң башҡа төрҙәре хаҡында һорашырға онотмаҫҡа саҡыра. Уларға ҡайһы яҡтан, нисек күҙәтеү яһарға — шуларға ҡағылышлы файҙалы кәңәштәр ҙә бар инструкцияла. Шунда уҡ ғалим экспедицияларҙы ҡайһы тарафтарға нисек ойоштороу хаҡында ла һүҙ алып бара.

Ә.Ә.Диваевтың инструкцияһы бер ни тиклем уның замандашы һәм милләттәше Нуриағзам Таһиров 1922 йылда Стәрлетамаҡта баҫтырып сығарған *"Башкорт халкының байҙығын белеү, тарих, йәгрәфияләренә кәрәкте уҙыктарын йыйнау, комарткыларын сүптән табыу һәм туптау өсөн кулданма"*ны хәтерләтә. Эйе, хәтерләтә генә. Ә.Ә.Диваев инструкцияһында күберәк ҡәбилә, ырыу, ғөмүмән, ҡәүем эсендәге мөнәсәбәттәргә, йола хоҡуғына, матди мәҙәниәткә ҡағылышлы кәңәштәргә урын мулыраҡ бирелә. Ә.Ә.Диваев хеҙмәттәренә хас был үҙенсәлек Н.И.Гродековтың йоғонтоһонан килеүе ихтимал (Был түрә 1884 йылда ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ хоҡуҡ йолалары буйынса мәғлүмәттәр йыйып яткан була. Шулар нигеҙендә 1889 йылда Ташкент ҡалаһында *"Свод современных юридических обычаев киргизов и каракиргизов Сырдарьинской области"* тигән хеҙмәтенең беренсе томын баҫтыра (7,8).

Н.Таһировтың 40 битлек "ҡулданма"һында иһә үҙәктә фольклор жанрҙары, уларҙың эске төрҙәренең өлгөләре, яҙып алыу тәртибенә ҡағылышлы мәғлүмәттәр, кәңәштәр бирелгән. Фольклор өлгөләрен йыйыусылар ҙа, этнографтар ҙа шул ике методик ҡулланманы үҙ эштәрендә бөгөн дә уңышлы ҡуллана ала: улар күп яҡтан бер-береһен тулыландыра.

Ә.Ә.Диваевтың эш алымдары ла махсус өйрәнелеүгә һәм бөгөнгө фольклорсы һәм этнографтарҙың файҙаланыуына лайыҡ. Фольклорҙы йыйғанда Диваев информаторҙан бер тапҡыр мәғлүмәт алыу менән генә сикләнмәгән, уға ҡайта-ҡайта йөрөгән, йәғни ул ғәмәлдә йыйыу эшенең стационар формаһын да ҡулланыр булған (7, 18). Йыйылған фольклор материалдарына Диваев ентекле аңлатма биреп барыр булған. Ғалим һәр әҫәрҙә телгә алынған исемдәргә, ер-һыу атамаларына, көнкүреш күренештәренә генә түгел, айырым лексик берәмектәргә лә аңлатма бирә барған. Шул арҡала ул аңлатмалар этно-лингвистик белешмә төҫөн алыр булған. Тәҡдим ителгән һәр әҫәрҙең төрлө версия, варианттары хаҡында ла мәғлүмәттәр ҙә теркәлгән. Быныһы иһә Ә.Ә.Диваев төҙөгән аңлатмаларҙы фольклор ғилеменә туранан-тура мөнәсәбәтле итә.

### 5. Диваев туплаған материалдарҙың башҡорт фольклор ғилеме өсөн әһәмиәте

Фән күҙлегенән ҡарағанда, Ә.Ә.Диваев ҡулы менән яҙып алынған ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, үзбәк, ҡарағалпаҡ халыҡтарының ауыҙ-тел ижады өлгөләре XIX быуат ахырында һәм XX быуаттың тәүге сирегендә был ҡәүемдәргә хас фольклорҙың дөйөм торошо, жанр составы, йәшәү рәүеше хаҡында бай мәғлүмәт тупланмаһынан ғибәрәт.

Мәғлүм булыуынса, ул осорҙарҙа башҡорт фольклоры өлгөләре, С.Г.Рыбаковтың — йырҙарыбыҙҙы, А.Г.Бессоновтың әкиәт, эпос, ле-

гендаларыбыҙҙы йыйыу менән махсус шөғөлләнеүен иҫәпкә алмағанда, урыҡ-һурыҡ ҡына, осраҡлы рәүештә генә теркәлә. Әммә халҡыбыҙҙың көнитмеше, этнографияһы, ауыҙ-тел ижады ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ халыҡтарыныҡы менән күп йәһәттән оҡшаш. Ә.Ә.Диваевтың ғилми мираҫын тикшереүсе С.Н.Смирнованың мәҡәләһендә шундай фекер бар: *"Когда в 1883 году Диваев начал собирать образцы казахской народной поэзии в Аулие-Атинском уезде, где он сделал первые записи, еще можно было наблюдать кочевую жизнь аулов, слышать старинные сказания, легенды и песни, видеть камлания баксы"* (7, 12—13). Диваев үҙе иһә шундай иҫкәрмә яҙып ҡалдырған: *"Какой бы стороны (*казахской. — *Ә.С.) поэзии вы ни коснулись: эпический или лирической или прозы, вы сразу же заметите, что они носят на себе особый, только присущий кочевому народу характер, особенности, колорит"* (по С.Н.Смирновой, 7, 19—20). Башҡорттар, әлбиттә, бер ҡасан да күсмә халыҡ булмаған, борондан ауылдарҙа, ултыраҡ тормошта йәшәгән, аҙ булһа ла иген иккән. Әммә уларҙа ла дала халыҡтарына хас үҙенсәлектәр һаҡланған. Мәҫәлән, аттарға мөнәсәбәттә. Бик боронғо башҡорт бейеүҙәре йыш ҡына атҡа бәйле булған. Бейеүҙең туҡытыу (туҡылдатыу) төрө аттың төрлө йөрөшөн хәтерләткән. Халҡыбыҙ өсөн милли гимн хисабындағы мәшһүр "Урал" йырындағы *"Арал диңгеҙенән Алтайғаса йәйелеп ята башкорт далаһы"* тигән һүҙҙәр *"Йырҙарың күп һинең, моңдарың күп, әйҙә, йырла, башкорт балаһы"* тигәненә рифма өсөн генә әйтелмәгән. Ғәрәп хәлифәтенән ил гиҙергә сыҡкан Әхмәт Ибн Фаҙлан 922 йылда башҡорттарҙы тәүләп Арал диңгеҙе буйында осрата. Алтай тарафтарында, Иртыш башындараҡ Башҡорт йылғаһы, Башҡорт далаһы тигән урындар бар, ти (20, 138). Тимәк, ҡасандыр башҡорт үҙ иленең киңлеген, география дәреслегенә теркәгән кеүек, йырына беркетеп ҡуйған.

Башҡорттоң йырында, мәҡәлендә, эпосында, космогонияһында ат образының йыш осрауы ла уның йәшәү рәүешенән килә. Ыҙғытып мал ҡыуғанда ла, малына ябырылған барымтасыларға ҡаршы сыҡканда ла, илен-ерен ҡурсалап яуға сапҡанда ла тоғро арғымағы башҡорттоң төп таянысы булған.

Башҡорт менән ҡаҙаҡтың ҡайһы бер ырыуҙары этногенетик яҡтан бер тамырҙан. Уларҙың әлегәсә уртаҡ этнонимлы булыуҙары ла (мәҫәлән, Ҡыпсаҡ, Үҫәргән һ.б.) шул турала һөйләй.

Ҡаҙаҡтарға мәғлүм фольклор жанрҙарының күбеһе башҡорт фольклорына ла хас. Быға төшөнөү өсөн Ә.Ә.Диваев үҙ ҡулы менән 1922 йылда яҙған бер белешмәгә күҙ һалыу ҙа етә. Етеһыу буйында тупланған, ике мең ярым бит тәшкил иткән фольклор һәм этнографик яҙмаларҙы ул шулай төркөмләп сыҡкан: *"свадебные ритуалы, похоронные обычаи, поминки (ас), траур (кара-салу), былины, поэмы, сказания, предания, легенды, заклинания, демонологические рассказы, сказки, басни, афоризмы, пословицы и поговорки в прозе и стихах, смехотворки, небылицы, скороговорки, загадки, песни любовные, нравоучительные, духовные, состязания в стихах импровизаторов-певцов (акынов), причитания по покойникам, сны и их толкования, приметы на все случаи жизни, киргизские (*казахские. — *Ә.С.) болезни и способы их лечения, баксы как лекарь и колдун, его ближайшие помощники: дивы, джинны, пери и противники: албасты, кара-албасты, марту, обр, бичура (бишара), уббе (оба), жез-тырнак, заклинате-*

*ли-арбаушы, космогония (воззрения киргизов на небесные явления), киргизское летоисчисление с обозначением народных примет на каждое время года, киргизское двенадцатилетнее, по названиям животных, летоисчисление — мучель (мушел), киргизское скотоводческое хозяйство, киргизские мироеды (аткамнары), предания о происхождении казах-киргизов, дунган,таранчей, ногаев, сказания о Тимуре, Александре Македонском и ветхозаветных патриархах"* (13, 157).

Ә.Ә.Диваев туплаған ҡаҙаҡ фольклоры өлгөләре араһында ҡаһарманы ла, сюжеты ла башҡорт фольклоры менән уртаҡ әҫәрҙәр осрай. "Туғыҙ Туңҡылдаҡ, бер Шиңҡылдаҡ", "Ерәнсәнең Ҡарасәскә ҡоҙа төшөргәне", "Хан менән Ҡарасәс", "Ерәнсә менән Алдар күҫә", "Ерәнсә тураһында" ише әкиәттәр (16, 40, 62—67, 80—85) ана шундайҙарҙан. Был юмористик һәм новеллистик әкиәттәрҙең тәүгеһенең беҙҙәге вариант һәм версиялары халыҡ-ара әкиәт күрһәткестәрендә АТ 1535 (*Киммәткә төшкән тире*) + яҡынса 1537 (*Үле кәүҙә*) сюжет типтарынан торған "Туғыҙ Туңҡылдаҡ менән бер Мыймылдаҡ" тигән әкиәткә (3, №37) тап килһә, ҡалғандары беҙгә мәғлүм "Торахан менән Йәнәбәхан һәм Ерәнсә сәсән", "Ерәнсә сәсән хикмәттәре" һәм Алдар хаҡындағы башҡорт әкиәттәре менән күп уртаҡлыҡтарға һәм оҡшашлыҡтарға эйә (2, № 1, 4, 126—131). Алпамыс (Алпамыша), Шура (Сура), Идигә (Иҙеүкәй) батырҙарға бағышланған эпостар хаҡында ла шуны уҡ әйтергә була.

"Ҡобланды" эпосын беҙ элек саф ҡаҙаҡ эпосы тип таный инек. Уның да башҡорт версияһы барлығы асыҡланды. Бер вариантын уҙған йөҙйыллыҡтың 80-се йылдары башында профессор Ғайса Хөсәйенов Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ районында тыуып үҫкән Фәсхетдин Ишбулдиндан яҙып алды. 1984 йылда ғалим шул уҡ өлкәнең Красногвардейский районы Юлтый ауылында эпостың башҡорт версияһының тағы бер вариантына юлыға. Уны ҡулъяҙма хәлендә Һөйөндөкова Сабира (1905) тапшыра (4, 381).

Мәғлүмдер ки, Ырымбур өлкәһе Ҡаҙағстан менән сиктәш. Яйыҡтың бирге яғындағы башҡорттар араһында — ҡаҙаҡтар, аръяғындағы ҡаҙаҡтар эсендә элек-электән башҡорттар ҙа йәшәй. Борон-борондан был ике халыҡ былай ҙа аралашып, моң бүлешеп йәшәй. Шуға күрә лә ҡаҙаҡ эпосының башҡорт иртәкселәре репертуарына килеп инеүе, шунда ерегеүе һис тә ғәжәп түгел. Тимәк, ерегер ерлеге булған. Әммә Ҡобланды батыр хаҡындағы эпосты беҙ барыбер ҡаҙаҡтыҡы тип беләбеҙ. Ләкин шулай иҫәпләүебеҙ, уның башҡорт араһында ла мәғлүм булыуын, хатта үҙаллы версия хасил итеүен иҫтән сығарып ташларға кәрәк тигәнде аңлатмай. Шуға ла арабыҙҙан иртә киткән һәләтле фольклорсыбыҙ Берйән Байымов тарафынан эпостың әле телгә алынған ике вариантының тәүгеһенең "Башҡорт халыҡ ижады" тупламаһының эпостарҙан төҙөлгән 4-се томына индерелеүе үҙен аҡлай.

Ошо факттарҙы иҫәпкә алғанда, Ә.Ә.Диваевтың ғилми-ижади мираҫын тәптән өйрәнеү, үҙебеҙҙең фольклорыбыҙҙың шул замандарҙағы дөйөм торошон, үҙгәреү тенденцияларын төҫмөрләргә мөмкинлек бирер ине. Милләтебеҙ эсенән сыҡҡан оло шәхесебеҙҙең ғилми эшмәкәрлегенә 25 йыл тулыу мөнәсәбәте менән яҙған әлеге мәҡәләһендә, тап шуны күҙ уңында тотҡандай, Әхмәтзәки Вәлиди шулай тигән: *"Үҙе бик күп ваҡыт ҡаҙаҡ араһында торған һәм ошо юл менән уларҙың тормош һәм көнкүреш-*

*тәре, тел һәм әҙәбиәтенең төрлө тарафтарын бик диккәтле һәм тәбиғи өйрәнгән этнограф булған Әбүбәкер әфәнде, үҙенең ғүмерендә каҙак тормошона, халкына караған ни генә осратһа ла, калдырмайынса яҙып, теркәп барған. Һуңынан, һарттар араһында тороп, уларҙың тормошон да өйрәнгән. Ләкин каҙак тормошо күңеленә артығырак ятышлы булғанғамы, йәки ул тормош артығырак оригиналь булғанғамылыр, Әбүбәкер әфәнденең бар хеҙмәте тиерлек каҙак халкы, каҙак этнографияһына карай. Беҙ, үҙебеҙҙең милли ғәҙәт, йола, әҙәбиәтебеҙ менән танышкыбыҙ килһә, Әбүбәкер әфәнденең әҫәрҙәрен укырға һәм, уларҙы үҙ халкыбыҙ куллана алһын өсөн, яңыртып куйырға тейешбеҙ"* (9). Шул уҡ мәҡәләһендә Әхмәтзәки Вәлиди был фекергә ҡайта-ҡайта баҫым яһаған. Бер урында: *"Әбүбәкер әфәнде йыйған әйберҙәр — беҙҙең телебеҙ һәм халкыбыҙ өсөн баһалап бөткөһөҙ хазиналыр. Әгәр улар төрки телендә нәшер ителһә, уларҙың киммәте беҙҙең милли тормошобоҙ өсөн тағы ла артығырак булыр ине. Беҙҙең милли тормошобоҙҙоң тәрәнлектәрен белергә теләһә, уға Радлов, Диваев, Катанов, Потанин тарафынан йыйылған милли үҙенсәлектәребеҙҙе үҙгәрешһеҙ һаклаған төрки этнографияһы буйынса материалдарҙы өйрәнергә кәрәк"* — тиһә, икенсе урында: *"... беҙҙең халыктың саф кәүми тормошо һарттың (*йәғни үзбәктең. — *Ә.С.) Әбү Мөслим укып ултыра торған сәйханаларында, Ҡаҙан татарының каптырмалар (*төймәләр. — *Ә.С.) тултырып, аркаһына аҫкан кырктартмаһында түгел, бәлки кәүми үҙенсәлеккә бай, һүҙгә оҫта, ғәҙәт, йолалары беҙҙең бик боронғо тарихыбыҙ менән бергә тыуған каҙак, кырғыҙ халыктары араһындалыр"*, — тигән (10). Тимәк, һәр фәнгә маһир күренекле шәхесебеҙҙең ғилми-ижади эшмәкәрлеге, мираҫы хаҡында, уның тыуыуына 150 йыл тулыу айҡанлы, ғилми симпозиум кимәлендә һүҙ алып барыуыбыҙ киләсәктә атҡарыласаҡ шул мөһим изге эштең башы, тип нарыҡланыуға хаҡлы.

Мәшһүр милләттәшебеҙ тарафынан тупланған ҡәрҙәштәребеҙ фольклоры өлгөләре күптән инде үҙебеҙҙең фольклор өлгөләребеҙ менән сағыштырмаса юҫыҡта өйрәнелеүгә мохтажлыҡ кисерә. Диваев та фольклорҙы сағыштырмаса юҫыҡта өйрәнеүҙең әһәмиәтен яҡшы аңлаған. Үҙенә быңдай эш менән шөғөлләнергә тура килмәгән. Әммә ошо хаҡта әйткәне әле лә актуаллеген юғалтмаған. Бына нимә тигән ул ошо хаҡта: *"...основательное изучение былин и других отраслей народной словесности немыслимо в настоящее время без помощи сравнительного метода, применяемого с этой целью в весьма широких размерах"* (По С.Н.Смирновой. 7, 25).

## 6. "Сура батыр" эпосы: Ә.Ә.Диваев версияһы менән башҡорт версияһы араһындағы оҡшашлыҡтар, уртаҡлыҡтар һәм айырмалыҡтар

1895 йылда Ә.Ә.Диваев "Средняя Азия" тигән альманахта (1896 йылға календарь баҫтырған ғилми-әҙәби йыйынтыҡта) "Шура батыр (Киргизская былина)" тигән исем аҫтында бер эпос баҫтыра. Иҫкәрмәлә уның Чимкент уезында Майлыхужа Солтанхужин тигән ҡырғыҙҙан яҙып алыныуы әйтелгән ("ҡырғыҙ" тигән һүҙ ул саҡта әле беҙ "ҡаҙаҡ" тигәнде аңлатҡан). Эпостың башланып китмеше *"бала бәхетенән мәхрүм ғаилә"* мотивына ҡоролған. Шул яғы менән ул берсә ҡырғыҙҙың "Манас"

эпосының, берсә төрки донъяһында, шул иҫәптән башҡортта ла киң билдәле "Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу" һәм "Таһир менән Зөһрә"нең, берсә "Ҡорҡот ата" тигән оғуз дастанының башланмышын, йәғни уларҙың сюжеттарының экспозицияһын хәтерләтә: тәүгеһендә — Яҡуп атлы уҙаман, икенсеһендә (Т.С.Беляев версияһы буйынса) Ҡарабай тигән башҡорт батыры, өсөнсөһөндә (Рәхилә Теләкәева версияһынса) — ике хан, дүртенсеһендә Дирсе хан оҙаҡ ҡына дәүер үткәнсе бала һөйөү бәхетенән мәхрүм була (4, 70—73; 6, 332; 18, 24). Бары Хаҡ тәғәләнән ялбарып-ялынып һорай-һорай, башҡаларҙы һыйлап, фатиха алғас ҡына, уларҙың барыһының да теләктәре ҡабул була. Ә.Ә.Диваев баҫтырған "Сура батыр" эпосында, бындай бәхеткә ирешеү өсөн, Нариҡбай тигән бай Тарсанмырҙа тигән яҡын ҡәрҙәшенең үпкә һүҙен ишеткәс (ә ул бәйгелә ҡатнашыу өсөн ат бирмәгән ағаһына, шулай һаран һәм хәйләкәр булғанға ла Алла һине баланан мәхрүм иткән, ти), Алланы иҫкә алып, ҡорбандар салып, халҡын һыйлап, ҡатыны менән икәүләшеп кенә илдән сығып китеп, изгеләрҙең ҡәберҙәренә зыярат ҡыла-ҡыла, күп ауырлыҡтар татығас ҡына, атай булыу бәхетенә ирешә.

"Сура батыр" дастаны Ҡырым, Румыния, Ҡазан татарҙары, нуғайҙар һәм башҡорттар араһында ла мәғлүм әҫәр. Эпостың 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Люксембург районы Ҡолман ауылы Мөхәмәт Агишевтан Кирәй Мәргән яҙып алған башҡорт варианты ни бары утыҙ юлдан торған ҡобайырҙан ғибәрәт. Унан Сура батырҙың Ҡазан иленә яу менән китеп барыуы аңлашыла. Батырҙың бик тә тәүәккәл һәм ғәйрәтле булыуына ла төшөнөргә була. Ҡазанды алмайынса тынғы тапмаясағын аңлаған баһадир булып күҙ алдына баҫа.

Яуға китеп барамын,
Ҡазан илен аламын,
Ҡазан илен алған һуң,
Ҡайтып, ҡылысым һаламын (6, 210).

Илгә ҡайтып, ҡылысты һалыу — үтәлгән бурысты ла, шуға ирешкәс кенә батыр ирҙең тынғы табыуы мөмкин икәнен дә аңлата.

XX быуаттың 80-се йылдарында Баймаҡ районы Ниғәмәт ауылында мәшһүр ҡурайсы Кәрим Дияровтан (1910—1986) яҙып алынған версия Мөхәмәт Агишев версияһында әле килтерелгән өҙөктә һаран ғына әйтелгәнде тулыландыра, асыҡлай төшкәндәй итә. К.Дияров версияһы буйынса ла Сура батыр Ҡазанға яу менән бара. Тик уны яулау өсөн түгел, ә "беҙҙе лә урыҫҡа буйһондорорҙар, тәрегә ҡарап суҡынырға мәжбүр итерҙәр, тиҙерәк татарҙарға ярҙамға барырға кәрәк" тигән маҡсат менән бара (7, 416—417).

Силәбе өлкәһе Уй районы Әмин ауылынан Тимершаһ Рәхмәтуллин яҙып ҡалдырған версия үҙ сиратында К.Дияровтыҡына асыҡлыҡ индергәндәй була. Дияров версияһы буйынса, Сура батыр килеп еткәнсе рус ғәскәре Ҡазан ҡалаһын алған була. Т.Рәхмәтуллиндыҡы иһә "Ҡазан ғәскәре менән Сура ғәскәре бер булып, рус ғәскәрен ҡыуғандар. Ҡазан ханы шундай ярҙамы өсөн Сураны батыр тип иғлан иткән" (7, 414). Сура батыр Ҡазан ҡыҙын кәләш итә. Йәнәһе, "Ҡазан шәһәрендәге Оҙондар нәҫеле — шул Сура батыр тоҡомо" (7, 414), Иван Грозный Ҡазанды алғас, Сура батыр Уралдың ҡалын урманына китеп боҫа була. Был осраҡта "батыр" һүҙе "ҡыйыу" тигәндең синонимы ғына түгел,

дәрәжәнең (титулдың) атамаһын да аңлата. Ошо этнографик мәғлүмәтте һаҡлауы менән генә лә эпостың был варианты иғтибарға лайыҡ. Ә иң мөһиме — ул башҡорт-татар дуҫлығына дан йырлауға тиң.

Ә.Ә.Диваев версияһы буйынса ла, Т.Рәхмәтуллиндыҡында ла Сура батыр ҡаҙаҡ затлы тип күрһәтелә. Хатта ки уларҙың бер үк ата балаһы булыуы ихтимал икәненә ишара ла бар: тәүге вариант буйынса атай кеше — Нариҡбай, икенсеһендә Нүрәкмырҙа тип исемләнгән. Ике исем дә бер исемдең варианты булғанға оҡшай. Әммә тәүгеһендә ул — Тама нәҫеленән, икенсеһендә "ҡаҙаҡ халҡының Яғылбай нәҫеленән" тип күрһәтелгән. Уларҙың йәшәгән, биләгән, йөрөгән ерҙәре лә төрлөсә күрһәтелгән. Нариҡбай Ҡазан кешеһе була: Ҡазандан киткәс, Ҡармасанһаҙ тигән ергә килә. Ошо мәғлүмәткә ҡарап, етмәһә, Ҡармасан да телгә алынғас, Диваев версияһы башҡортоҡкона ныҡ тартым булыуы ихтимал, тип уйларға өлгөрәһең. Әммә уның аңлатмаһын "Средняя Азия" альманахы редакцияһы шик аҫтына алып, уға шундай төҙәтмә яһаған: *"Кажется, что автор ошибается, приурочивая гор. Казань тюркской легенды к "нынешнему гор. Казани". Город подобного названия существовал в Алмалыке (теперешнее Семиречье). Как легенда, упоминающая местности северозападной части Азии, так и он, рассказчик, едва ли знают европейскую Казань: в жизни средне-азиатцев она никакой роли не играла" (27, 79).*

Нариҡбай, Ҡазандан киткәс, Ҡармасанһаҙҙы үтеп, Ҡараһыу, Аҡһыу тигән яҡтарҙа була. Ваҡиға артабан Аҡкалатауҙа, Ҡалмыҡ иләндә бара. Рәхмәтуллин версияһы буйынса иһә Нүрәкмырҙа, "Бохара иленән күсеп, Чалкар күле тирәһенә килеп ултырған" (7, 412), шунда йәйләп ғүмер кисергән.

Диваев версияһы буйынса, Сура батырҙың әсәһе — Гөлханыс, Рәхмәтуллинда — Тайдулла.

Ер-һыу атамалары, кеше исемдәренең вариантлашыуы — фольклор әҫәре, бигерәк тә эпостың сәсмәүер хәлендә таралған версиялары өсөн тәбиғи хәл. Иң мөһиме сюжетты тотоп торған ваҡиғала. Ошо хәҡикәттән сығып фекер йөрөткәндә, Диваев версияһы менән Рәхмәтуллиндыҡы араһындағы ҡайһы бер оҡшашлыҡ һәм уртаҡлыҡтар, әле әйтелгәндәрҙән аңлашылыуынса, экспозиция кимәленән үтмәй тип һығымта яһарға ҡала. Сөнки икеһенең сюжеты, ике тарафҡа тартылып, ике төрлө үҫеш ала. Рәхмәтуллин верисияһының фабулаһы хаҡында әйтелгәндән уның сюжеты ҡайһылай үҫешеүе беҙгә мәғлүм инде. Диваевтыҡында ниндәй йүнәлеш ала ла, нисек үҫешә, хәҙер ҡыҫҡаса шул турала һүҙ алып барып ҡарайыҡ.

Бала һөйөү бәхетен татыуҙан мәхрүм булыуҙарына ғәрләнеп, бар байлыҡтан ваз кисеп, изгеләрҙең ҡәберенә, шул иҫәптән изге Хызыр менән осрашҡандан һуң, уның кәңәше буйынса, беҙгә Иҙеүкәй (Идигә) хаҡындағы эпостың башҡорт, нуғай, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ версияларынан мәғлүм изге зат Баба-Туҡты-чач ҡәберенә лә зыярат ҡылғандан һуң, ирле-ҡатынлы Нарыҡбай менән Гөлханыс, өр-яңынан ҡауышып, һөйөшөп, береһе — атай, береһе әсәй булыуға өлгәшә. Уларҙан тыуған Сура (Шура) ай үҫәһен көн үҫеп, йыл үҫәһен ай үҫеп, баһадир булып киткән әкиәт батырын хәтерләтеп, тиҙ арала егет ҡорона инә. Әммә, әкиәт батырҙарынан айырмалы рәүештә, Диваев вариантында уның физик яҡтан ғына түгел, интеллектуаль йәһәттән дә тиҙ камиллашыуына иғтибар иттерелә. Бына ни тиелә был хаҡта ул баҫмала: *"Имея от роду всего лишь сорок дней, он уже смеялся и отличал родителей от посторонних.*

*Одного года он поражал всех красотою, двух лет вырос до неузнаваемости, трех лет был подвижен как птица, четырех лет поступил в школу, пяти лет достиг высшего образования, десяти лет проявил гордость и отважную смелость, одиннадцати лет стал настоящим красавцем — мужчиною.., двадцати лет он стал сказочным богатырем"* (11, 99). Үҙенә ырыуҙаш булған 40 малайға һөжүм иткән Айраҡты ырыуының 1000 малайын ҡыйратып һала. Айраҡты ырыуы башлығы Ғәле (Али) бей заманында Ҡарахан исеменән Сураның атаһын да, уның ырыуҙаштарын да ныҡ ҡыйырһытҡан була. Сура уны ла еңә, аҙаҡ илгә тынғы бирмәгән ҡалмыҡтарҙы үҙ илдәрендә һыҙырып һала. Ҡалмыҡтарҙың башлығы Ҡарамандың һарайын ала, башын киҫеп алып, үҙенең ханына тапшыра, уның Ханыҡай тигән һеңлеһен үҙенә кәләшлеккә ала, Таныҡай тигәнен Ысым бей тигән юлдашына бирә, ә ҡыҙын Тасан мырҙа тигән ҡәрҙәшенә никахлай.

Хикәйәләү стиле йәһәтенән дә эпостың Диваев версияһы башҡорттарҙан яҙып алынғандарынан ныҡ айырыла. Унда бер ни тиклем яҙып алыусыныңмы, кеменеңдер ҡул тығыуы ла һиҙелә биреп ҡала. Был үҙенсәлек күренештәрҙе деталләп тасуирлауҙа, персонаждарҙың уй-ниәттәре хаҡында һүҙ барғанда, әҙәби әҫәрҙәргә хас психологизациялауҙа күҙәтелә. Бына бер миҫал: *"Муж и жена спали словно мертвые. Последние лучи заходящего солнца уже скрылись с неба и стало смеркаться, когда предстал у изголовья Гуль-ханыс святой Бабай — Тукты-чач со своими сорока сподвижниками"* (11, 94*). "Восторг Гуль-ханыс был настолько велик, что она плакала от избытка чувств и дрожала всем телом. Последние слова святого все еще звучали в ее ушах и приводили ее в умиление"* (11, 94).

Диваев версияһының стиле бер ни тиклем "Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу" эпосына нигеҙләнеп, уның сюжетын һәм фабулаһын үҙенсә интерпретациялап, Т.С.Беляев яҙған "Башҡорт повесы"н хәтерләтә. Монолог һәм диалогтарҙың *"О, мой блаженный праведник!"*, *"О, дитя мое!"*, *"О, неутешное дитя!"*, *"О, дитя мое!"*, *"О, дорогой мой Нарикбай!"*, *"О, дорогая моя!"* кеүек юғары стилдәге өндәштәрҙән башланыуы (11, 94) шул повестағысараҡ.

"Башҡорт повесы"н хәтергә төшөрөргә шул да мәжбүр итә. Балаһыҙҙан интегеүсе Ҡарабайға йә уның улы Ҡуҙыйкүрпәскә повеста берсә әүлиә, берсә Хызыр Ильяс аҡыллы кәңәш һәм изге теләктәр әйтә, уның теләктәрен Хаҡ тәғәләгә еткерә (21). "Сура батыр"ҙың Диваев версияһында Нариҡбай менән Гөлханыстың атай-әсәй булып китеүенә лә шулар булыша.

Аллаһы тәғәләгә ялбарып, бала һорағанда, Нариҡбай бар халҡын һыйлап, уларҙан фатиха алған кеүек, Ҡарабатыр ҙа, шундай уҡ теләге ҡабул булһын өсөн, халыҡты һыйлауға һыйын йәлләмәй. Хәйер, *"Алланан бала һорап, халыкты һыйлау"* мотивы "Манас" менән "Ҡорҡот ата" эпосында ла ҡабатлана. Әйткәндәй, Манаска ауырға ҡалған сағында Яҡуптың ҡатыны Чийырденың юлбарыҫ йөрәге ашағыһы килә (23). "Сура батыр" эпосының Диваев версияһында ла ошо мотив ҡабатлана, бары шундай айырмаһы менән: теләктәре ҡабул булып, Сураға ауырға ҡалғас, Гөлханыстың арыҫлан ите ашағыһы килә (11, 97).

Ошо уҡ мотив, тағы төрләнә биреп, "Сура батыр" эпосының башҡорт версияһының бер йыйылма вариантында ла һаҡланған. Илдән

сығып киткән ирҙең ҡатыны, Сураға ауырға ҡалғас, тәҡәтһеҙ тарпан ите ашарға теләй (7, 402). Эпостың башҡорт версияһының был вариантында ла, тимәк, балаһыҙ ирҙең, эпостың Диваев версияһындағы Нариҡбай, "Манас"тағы Яҡуп кеүек үк, илдән сығып китҡәс кенә, ҡатыны балаға уҙа. Тимәк, *"Бала һөйөү бәхетенән мәхрүм булған ир менән ҡатын илдән киткәс кенә теләктәренә ирешә"* мотивы былдай типтағы эпостар өсөн тотороҡло һаҡлана. Дөрөҫ, ул төрлө эпоста йә бер үк эпостың төрлө версия һәм варианттарында төрлөсә үҙгәрергә, варианттлашырға мөмкин. "Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу", "Таһир менән Зөһрә" ише эпостарҙа, мәҫәлән, бала көҫәүсе ир менән ҡатын илдәрен ташлап донъя гиҙеп сығып китмәй: ир кеше ситтә саҡта йортта ҡалған ҡатыны бала таба. Күрәһең, эпос өсөн, бала тыуғанда ирҙең ситтә булыуы ла әлеге мотивтың эквивалентына тиң иҫәпләнгән. "Манас" эпосында иһә илдән ситтә булыуға икеләтә баҫым яһала: беренсенән, Яҡубы менән бергә илдән киткәс кенә Чийырде балаға уҙа ла, ире йорттан ситтә саҡта уны донъяға килтерә.

*"Бала һөйөү бәхетенән мәхрүм булған ир менән ҡатын илдән киткәс кенә теләктәренә ирешә"* мотивы һәм уның эквиваленттары хәҙер этнографик нигеҙе онотолған боронғо бер инаныҫҡа, йолаға ҡайтып ҡалғанға оҡшай. Быға, бәлки йәшәгән урынды, нигеҙҙе алмаштырһаң, сир-зәхмәттән ҡотолаһың тигән инаныс, бәлки, башҡаһы сәбәпсе булғандыр.

"Сура батыр" эпосының башҡорт версияһының йыйылма вариантында, уның Диваев версияһы һәм әле телгә алынған башҡа эпик ҡомартҡылар менән сағыштырғанда, ирле-ҡатынлының илдән сығып китеүе бөтөнләй икенсе төрлө нигеҙләнә. Әйткәндәй, Сура батырға атай булаcаҡ уҙаман Нариҡбай бей тип таныштырыла. Әйтелгәненсә, был исем Диваев версияһындағы Нариҡбайҙы хәтергә төшөрә. Әммә был вариант буйынса ваҡиға тәүҙә Ҡырым ханлығында башлана ла артабан Тын, Иҙел башы — Ирәмәлтау, Яйыҡ башы — Ямантау, Турат башы — Аҡ сатыр һәм Ҡазан тарафтарында дауам итә. Диваев версияһынан айырмалы рәүештә, был вариант, Ҡазан тигәндә, Алмалыҡ йүнәлешендәге шул исемдәге ҡаҙаҡ ҡалаһы түгел, ә Оло Иҙел (Волга) ярындағы татар ҡалаһы күҙ уңында тотола.

Нарыҡбайҙың илдән сығып китеүенә иһә, уны Мәскәү кенәзлегенә ебәреп, сибәрҙән сибәр ҡатыны Миңһылыуҙы Ҡырым ханының үҙенә ханбикә йә йәриә итергә маташыуы сәбәпсе була.

Шулай итеп, эпостың был вариантының сюжетына үҫергә мөмкинлек биреүсе хеҙмәтен *сибәр ҡатын хаҡындағы беҙгә мәғлүм АТ 465 С* тибындағы тылсымлы әкиәт мотивының новеллистик әкиәткә хас реалистик варианты үтәй. Уның финалы, тылсымлы вариантындағы кеүек үк, сибәр ҡатынды ҡулға төшөрөргә теләүсе мәкерҙең үҙ башына үҙе етеүе менән тамамлана: юғары фарманға буйһоноп ситкә киткән кеше булып, йәшенеп торған Нарыҡ бей ханды үлтерә. Ҡатынын алып, уның илдән ситкә олағыуына бына шул сәбәпсе була ла инде.

Эпостың башҡорт версияһы буйынса, Сура батыр тыуғас, Уралға килеп ерегеп, ил-йорт әсендә Нарыҡ бей абруй ҡаҙана. Сюжеттың артабанғы үҫеше, ҡырлап-ҡырлап, эпостың Диваев варианты менән ауаздашыраҡ төҫ ала. Ҡаҙаҡ версияһының ҡаһарманы кеүек үк, 13—14 йәшендә яуға сығыр батыр булып етешә Сура. Әгәр Диваевтыҡында Айраҡты ырыуы

башлығы Fәле бей Сура батырҙың атаһын яралаһа, малын тартып алһа, һүҙ барған башҡорт вариантында ла быңдай яуызлыҡты ҡылыусының исеме Fәле. Әммә ул Ҡатай ырыуы бейе тип таныштырыла. Йөҙмә-йөҙ осрашҡанда, Сура батыр менән Fәле бей, йола буйынса, бер-береһенең йәненә тейерлек һүҙҙәр әйтешә, йәғни "Ҡарас менән Аҡша" эпосы ҡаһармандары һымаҡ уҡ, хурлау-хурлашыу йолаһын атҡаралар, шунан һуң ғына һәр кем үҙ ҡоралына тотона. Уларҙың әйтеше — ҡобайыр рәүешендә, Диваев версияһында ике яҡтың әйтеше сәсмә телмәр рәүешендә бирелгән. Әммә ике осраҡта ла әр һүҙҙәре мул ҡулланылған әйтештең функцияһы бер үк: ул алышҡа сығыусыларҙы йөрәкһетеп алыуға, уҙаҡтарҙың һарыуын ҡайнатыуға тәғәйенләнә.

Дошман ырыуын еңгәс, герой ике версияла ла, күңеле төшөп, үҙенә урын тапмай йөрөй. Уның был тороштан сығыуына Диваев версияһында Сура батырҙың ҡалмыҡтарға ҡаршы яу асыуы, башҡорт версияһы буйынса иһә Ҡазанды рустар ябырылыуынан һаҡлашырға яуға китеүе сәбәпсе була.

Шулай итеп, эпостың башҡорт версияһының йыйылма вариантында сюжет һыҙығы, нигеҙҙә, Диваев версияһыныҡын ҡабатлай. Айырмалары тәүгеһендә ваҡиғаларҙың атап ҡына кителеүенә, икенсеһендә ентекле тасуирланыуына, психологизацияға урын бирелеүенә; тәүгеһендә монолог, диалогтарҙың ҡобайыр үлсәменә һалыныуына, икенсеһенең тик сәсмәүерҙән генә тороуына, ваҡ деталдәргә һәм финалға ҡайтып ҡала. Ә финал былай: Диваев версияһы буйынса, дошмандарын ҡыйраҡтас, Сура батыр иленә ҡайта; башҡорттоҡо буйынса, Ҡазанды яҡлап, яуҙа һәләк була. "Яуҙағылар, ул Иҙел һыуына батып һәләк булды, тиҙәр" (7, 411). Башҡорт версияһының шулай сиселере көн элгәре үк билдәләнә. Был билдәләнеш вазифаһын Нарыҡ бейҙең Миңһылыу тигән ҡатынының төшө үтәй. Балаға ҡалғас, Нарыҡ бейҙең ҡатыны Миңһылыу төш күрә. Ана ул нимә ти: *"Төшөмдә аяғымдың (*дөрөҫөрәге, ботомдоң. — *Ә.С.) араһынан бер ут сыкты. Уттың бер осо — ерҙә, икенсе осо күккә олғашты, йыйылып киткән кешеләр ... һыу һиптеләр — ут тамсы ла һүрелмәне. Ҡапыл ҡара ямғыр сығып яуып үткәйне — ут һүнеп ҡалды. Быны ... мин үҙем улым тыуырына юрайым. Тик улымдың үлеме һыуҙан булыр, тип ҡурҡам" (27, 402).* Миңһылыуҙың юрағаны, тимәк, юш килгән.

### 7. "Иҙеүкәй менән Мораҙым" эпосының Әбүбәкер Диваев яҙып алған бер версияһының үҙенсәлектәре

Башҡорт фольклорында нуғай заманынан тороп ҡалып, "Иҙеүкәй менән Мораҙым" тигән исем менән таралған тарихи эпостың бер версияһын "Мирза Эдеге-батыр" тигән исем аҫтында, әммә берсә (1896 йылда) ҡырғыҙ эпосы тип (1, 25), берсә (1928 йылда) ҡаҙаҡтыҡы тип (1, 13), Ә.Ә.Диваев тарафынан ташҡа баҫтырылыуы мәғлүм. 1917 йылда эпостың йәнә бер варианты "Идигә батыр" тигән исем менән "Шура" журналының 15—16-сы һандарында "Әбүбәкер әфәнде Диваевтың этнографияға ғаид әҫәренән тәржемә" тигән аңлатма менән донъя күрә (14).

Текстың аҙағында *"Тәржемәсе Әхмәт Сардар Ишкубаев"* тигән имза бар. Әммә Урта Азия, Ҡаҙағстан халыҡтары ижады белгесе Ә.Ә.Диваев эпостың был версияһын кемдән яҙып алған, Ә.С.Ишкубаев уны ҡайһы

телдән ”Шура” журналына яраҡлаштырып татарсаға тәржемә иткән — беҙгә мәғлүм түгел. Сөнки журнал мөхәрририәте лә, тәржемәсе лә был хаҡта бер һүҙ ҙә әйтмәгән (Ғилми баҫмаларҙа иһә, һис кенә нигеҙләп тормаҫтан, уның ҡаҙаҡтан икәне әйтелә (5, 354; 26, 8). Шул сәбәптәр арҡаһында, икеле-микеле фекер тыуыуға урын ҡала: бәлки, Әбүбәкер әфәнде уны башҡорттан ишетеп, ҡаҙаҡса яҙып алған булғандыр, бәлки, киреһенсә, ҡаҙаҡтан ишетеп, ҡаҙаҡ телендә теркәгәндер. Һәр хәлдә, эпостың ”Шура”ла баҫылған Диваев версияһы тик башҡортто̇ко ғына тип дәғүәләшеү урынһыҙ. Шулай ҙа яҙып алыусыһының милли сығышын, эҫәрҙең башҡорттар араһында таралған версияһы һәм шул версияның варианттары менән күпмелер оҡшашлыҡтары булыуын иҫәпкә алып, Диваев версияһын, ҡушымта рәүешендә булһа ла, ”Башҡорт халыҡ ижады” тупланмаһының эпостарҙан төҙөлгән 8-се томына индереү зыян булмаҫ тигән фекергә киленелде.

Эпостың Әбүбәкер Диваев версияһында ла, дүрт башҡорт әҙибе (Рәшит Ниғмәти, Баязит Бикбай, Мөхәмәтша Буранғолов, Әбүбәкер Усмановтар) төҙөгән йыйылма тексында ла, башҡа халыҡтарҙа мәғлүм версияларҙағы һымаҡ уҡ, Иҙеүкәйҙең кесе йәштән үк ғәҙел хөкөм сығарыуға маһир, бик тә зирәк булыуына иғтибар ителгән. Әммә, Н.Иҫәнбәт төҙөгән йыйылма вариантынан айырмалы рәүештә, уның ул һәләттәре ҡайҙа, нисек асылыуы айырым эпизодтар менән иллюстрацияланған, дөрөҫөрәге, тура әйтелмәйенсә, шул эпизодтарҙа күрһәтелгән. Диваев версияһы буйынса, әле бала сағында уҡ Иҙеүкәй бер дөйә балаһы өсөн талашыусы икәүҙең дәғүәһен еңел хәл итә: ул дөйә балаһына һуға — инә дөйәләрҙең береһе шуны йәлләй. Хөкөмдар малай шул дөйәнең эйәһен дөйә балаһының да эйәһе тип таба. Икенселәй, намыҫлы егетте, миңә йәбеште, тип ғәйепләүсе ҡыҙҙың нахаҡты һөйләүен; бер балаға талашҡан ике ҡатындың ҡайһыһы хаҡлы, ҡайһыһы нахаҡты һөйләүен дөрөҫ әйтеп бирә. Ике осраҡта ла ғәйепһеҙ килеш рәнйетелеүсе язаға тарттырылыуҙан ҡотҡарыла.

”Иҙеүкәй менән Мораҙым” эпосының башҡорт версияһы варианттарының берәүҙәрендә Туҡтамыш ханды (Диваевтыҡынса, Шаһ Тимерҙе) ҡалдырып, Аҡһаҡ Тимер яғына киткән Иҙеүкәйҙе нисек тоторға икәнен йә Һабрау сәсән, йә бүтән бер аҡыл эйәһе өйрәтһә, Ә.Ә.Диваев версияһында был бурыс мең йәшлек Ҡарт бабаға йөкмәтелә. Ул да, Һабрау кеүек, Иҙеүкәй бала саҡта уның зирәклегенә үҙенсәлекле имтихан үткәргән, йәғни уға симпатия менән ҡараған кеше була. Тимәк, егеттең көслө яғын да, йомшаҡлығын да Һабрауҙан яҡшыраҡ белгән кеше булмаған. Шуға ла Иҙеүкәйҙе нисек тоторға өйрәтеүе ул аҡыл эйәһе эпостың төп ҡаһарманы өсөн иң ҡурҡыныс зат булыуы тураһында һөйләй. Был — бер булһа, икенсе яҡтан, ошо ҡыланышы уны инде ныҡлап һарай сәсәне тип танырға мәжбүр итә.

Диваев версияһының сюжеты артабан берсә ”Тәүрәт” һәм ”Ҡөрьән”гә килеп ингән *Сибәр Йософ* тураһындағы сюжет менән Сибәр ҡатын хаҡындағы халыҡ-ара мәғлүм *AT 465 C* тибындағы тылсымлы әкиәт сюжетының контаминацияһын хәтерләтә. Зирәклеге өсөн Идигәне үҙенә уллыҡҡа алған Туҡтамыш хандың ҡатыны, егеткә үлеп ғашиҡлыҡтан, тәҡәт итә алмайынса, уны үҙенеке итергә маташа. Теләгенә ирешә алмағас, егетте эҙәрлекләтә: боҙоҡ бауыр ашата, бәүелен эсерә. Эпостың Диваев

версияһында Идигәнең ҡасып китеүе шулай нигеҙләнә. Геройҙың был аҙымы башҡорт версияһында иһә социаль ҡаршылыҡ һөҙөмтәһе тип күрһәтелә.

Эпостың Диваев версияһының тылсымлы әкиәт сюжетына нигеҙләнгән өлөшө иһә шунан ғибәрәт: Идигәнең ен затлы сибәр кәләшен үҙенеке итмәк булып, Шах Тимер уны берсә шифалы сәскә артынан Синабдаръя аръяғына, берсә күптән үлгән ата-әсәһе янына ебәрә: йәнәһе, әруахтарҙың хәлдәрен белергә теләй. Әммә әкиәт ҡануны үҙ көсөнә инә: уның мәкер уйы барып сыҡмай. Тәүге осраҡта, кәләшенең кәңәше буйынса, бармағына кейгән балдағы уға тағы бер сибәр ен ҡыҙы, кәләшенең әхирәте менән йәрәшергә булыша. Икенсе осраҡта Идигәне теге донъяға, үҙенең ата-әсәһе янына оҙатам тип, утта яндырырға теләгән шахтың мәкер уйын кәләше юҡҡа сығара: ҙур ҡош ҡиәфәтендә осоп килеп, уны ҡотҡара. Идигә шахтың үҙен уның үлгән ата-әсәһе янына оҙата.

Был сюжет буйынса, сибәр ен ҡатыны тәүҙә Идигәгә изгелек ҡылып, уны үҙ йортона алып ҡайтҡан ен затлы Аланғасар-әлифтең йәмәғәте була. Һылыу ҡатынды ҡулға төшөрөү өсөн, уның менән бер ауыҙҙан, бер һүҙҙән булып, Идигә Аланғасар-әлифте үлтерә. Был ҡылығы Идигәне, уның үҙен үлтереп, ҡатынын алырға теләгән батшаны хәтерләтерлек мәкер зат итеп күрһәтә. Был иһә халыҡтың ниндәйҙер өлөшөнөң Идигә-Иҙеүкәйгә оппозицияла булыуы хаҡында һөйләй.

Диваев ташҡа баҫтырған фольклор әҫәрҙәрен барлағанда, Әхмәтзәки Вәлиди *"Аланғасар-әлиф тураһында хикәйә"* тип бирелгән әҫәрҙе лә телгә ала. Тимәк, Идигә батырға Диваев үҙе лә оппозицион ҡараштa булғанда, шуны сағылдырыу өсөн, уның хаҡындағы эпостың был версияһында тылсымлы әкиәткә лә, инанмышҡа ла тартым үҙаллы әҫәр сюжеты бик уңышлы файҙаланылған. Шулай итеп, мәғлүм тарихи эпостың Ә.Диваев тарафынан паспортһыҙ теркәлгән версияһында тарихилыҡ нигеҙе, ҡаһарманлыҡ пафосы бөтөнләйе менән һүрелтелә, әҫәрҙең сюжеты мөхәббәткә, никахҡа тоғролоҡто раҫлаусы новеллистик башланғыслы тылсымлы әкиәт сюжеты ҡалыбына ҡойолғандай итә. "Иҙеүкәй менән Мораҙым" эпосының беҙгә мәғлүм башҡорт, татар, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ һәм нуғай версияларында әҫәрҙең төп идеяһын тарайтырлыҡ быңдай контаминация осрамай.

Мәғлүм тарихи һәм ҡаһарманлыҡ эпосының Ә.Ә.Диваев версияһында тормош-көнкүреш эпосына тартым әҫәргә әүерелеүе лә ғилми яҡтан әһәмиәткә эйә. Ул эпик сюжеттың бөтөнләй көтөлмәгән йүнәлештә үҫеш алыу мөмкинлеген, шул мөмкинлектең ғәмәлгә ашмыш механизмының нисек хәрәкәткә килеүен күҙәтергә форсат бирә. Киңерәк алғанда, был версия эпос менән әкиәт сюжетының контаминациялашыу тәбиғәтен асыҡлауға ла булыша.

Ҡәрҙәш милләттәр фәненә хеҙмәт итһә лә, бер эпостың Ә.Ә.Диваев тарафынан теркәлгән версияһына яһалған ҡыҫҡаса күҙәтеү ҙә ошо милләттәшебеҙҙең ғилми эшмәкәрлегенең башҡорт ғилеме өсөн дә әһәмиәткә эйә икәнененә бер дәлил ул. Беҙҙең алда уның Төркөстанда йәйелдергән фольклорсылыҡ эшмәкәрлеген мөмкин тиклем тулыраҡ иңләп, асылына тәрәнерәк инеү, ә быңың өсөн комплекслы күҙәтеү яһау бурысы тора. Ул саҡта, бәлки, Урта Азия һәм Ҡаҙағстанда йәшәгән халыҡтарҙың тарихына, этнографияһына, көнкүрешенә, инанмыштарына, фольклорына Әбүбәкер Диваевтың башҡорт күҙлегенән ҡарау-ҡарамауына ла төшөнөргә булыр ине. Ҡаҙаҡтың телен генә түгел, ауыҙ-тел

ижадын да, көнкүрешен дә, йолаларын да яҡшы белгәнгә, башҡа халыҡтарҙың фольклор өлгөләрен шул күҙлектән үҙләштергән саҡтары булған бит. Шуның кеүек, тимәксемен. Миҫалмы? Бар ул миҫал. 1896 йылда Һырдарья өлкәһенең Амударья бүлегенә ҡараған Дүрткүл улусында йәшәгән ҡарағалпаҡ кешеһе Ә.Ә.Диваевҡа "Алпамыс" эпосының ҡульяҙма хәлендә һаҡланған бер вариантын тапшыра. Шуға тиклем был эпосты тик ҡаҙаҡтыҡы тип белгән был ғалимыбыҙ, уны нәшер итеүгә әҙерләгәндә, телгә алынған урын исемдәрен ҡаҙаҡтар йәшәгән тирәләргә күсерә. Этнографик күренештәр хаҡында һүҙ барһа, уларҙы ҡаҙаҡтың көнкүрешенә хас күренештәр, тип аңлатма бирә. Эпостағы ваҡыт төшөнсәләрен дә ҡаҙаҡлаштыра: йылдың дүрт туҡһанға — ҡыш туҡһанына, яҙ туҡһанына, йәй туҡһанына бүленеүен билдәләп үтә. Эпостың Ж.Бекмөхәмәтов вариантын өсөнсө тапҡыр ташҡа баҫтырғанда иһә, ульяҙмалағы ғәрәп, фарсы һүҙҙәрен ҡаҙаҡ һүҙҙәре менән алмаштыра. Ҡараҡалпаҡтың ауыҙ-тел поэзияһына хас символик образдарҙы ла Диваев ҡаҙаҡ халҡының фольклорына хас образдар аша аңлата. (17, 181—185). Әйткәндәй, "Алпамыс"ҡа ҡул тығырға тырышыуы "Иҙеүкәй менән Мораҙым"ға тылсымлы әкиәт сюжетының Диваев тарафынан индерелеү ихтималы хаҡындағы фаразыбыҙға дәлил була ала.

***

1895 йылда Ташкентта Ә.Ә.Диваев ташҡа баҫтырған "Этнографические материалы: Сказки, басни, пословицы, загадки, приметы и былины туземного населения Сыр-Дарьинской области" йыйынтығына яҙған баһаламаһында Н.Ф.Катанов, ҡырғыҙ (ҡаҙаҡ) һүҙҙәре дөрөҫ транскрипцияланмауы өсөн, төҙөүсене тәнҡитләй. Айырата әйткәндә, ул шулай ти: *"Говоря о киргизах, автор старается отличить их слова от сартских и в отношении передачи киргизских слов старается быть точнее; тем не менее нельзя не поставить ему в вину того, что киргизские слова он передал на татарский лад, солгасно выговору волжских татар, так, например, он пишет: "муюн" (шея) вместо "моюн", "сай буи" (русло реки) вместо "сай-бои", "утав" (юрта для новобрачных) вместо "отау" и т. п." (19, 167).* Бында тәнҡитсе үҙе үк хата ебәргәнгә оҡшай: татар *"муюн", "сай буи"* тип әйтмәй. Һүҙ ҡырғыҙ (ҡаҙаҡ) һүҙҙәренең башҡорт кешеһе тарафынан, ирекһеҙҙән, үҙ теленә яҡынайтыуы, әммә русса транскрипцияның дөрөҫ бирелмәүе хаҡында барырға тейеш булғанға оҡшай. Һәр хәлдә, ҡаҙаҡ ҡәрҙәштәребеҙҙең фольклорына Диваевтың башҡорт күҙлегенән ҡарауына ул йыйған материалды, иләктән үткәргәндәй, ентекләп тикшергәндә, ышаныслы миҫалдар табырға булыр ине. Тап шуны күҙ уңында тотҡан һымаҡ, Әхмәтзәки Вәлиди әле 1915 йылда бына ни тигән: *"Беҙҙең Өфөбөҙҙән сыккан башкорт мырҙаһы Әбүбәкер әфәнде халкыбыҙҙың рухын һәм йәнен якшы белә. Ул үҙ халкын ярата, ул уның якшы тарафтарын белә һәм ярата. Беҙҙең карт этнографыбыҙ әле бынан һуң да оҙон ғүмер йәшәйәсәк һәм уны халык таныясак, ул үҙе лә үҙенең милли кәләменең эҙен һөйөклө халкының яңы майҙанға сығып килгән һәм был хөрмәтле картты кыҙыкһындырған әҙәбиәтендә калдырасак тип өмөт итәбеҙ" (25).* Беҙгә иһә, яңы заман фольклорсыларына, этнографтарына, шул өмөт аҡландымы-юҡмы, шуны асыҡларға ҡала. Был мөһим вә изге эштән тел белгестәре лә ситтә ҡалмаҫ, моғайын.